Тема: Рус ғалимдары һәм яҙыусылары ижадында Башҡортостан темаһы.
Үткәрҙе: башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы **Хәйруллина Илзидә Илдуҫ ҡыҙы.**
Маҡсат: рус ғалимдарының һәм яҙыусыларының Башҡортостанға арналған әҫәрҙәре менән танышыу, уларҙың ижадына уҡыусыларҙа ҡыҙыҡһыныу уятыу; тыуған илгә һөйөү, ихтирам тойғоһо тәрбиәләү; үҙ иленден патриоты булырға өйрәтеү.
Йыһазландырыу: рус ғалимдарының һәм яҙыусыларының портреттары, китап күргәҙмәһе (Башкирия в русской литературе. 1-се том.- Өфө, 1989, Башкирия в русской литературе. 2-се том.- Өфө, 1991, Башкирские народные песни – предания.- Өфө, 1987), әҫәрҙәргә иллюстрациялар.
Дәреслек: Тикеев Д.С., Ғафаров Б.Б. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте. Рус мәктәптәренең 9-сы класында уҡыусы башҡорт балалары өсөн башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәреслеге.- Өфө, 2006.
Дәрес барышы.
1. Уҡытыусының инеш һүҙе.
- Ун һигеҙенсе быуаттың икенсе яртыһынан башлап һәм ун туғыҙынсы быуатта Башҡортостандың тәбиғәтен, иҡтисадын һәм мәҙәниәтен өйрәнеүҙә, башҡорт халҡының тормошон, ғөрөф – ғәҙәттәрен сағылдырыуҙа рус ғалимдарының һәм яҙыусыларының хеҙмәте ҙур булды. Алдынғы ҡарашлы рус ғалимдары Башҡортостандың тарихын, халҡының этнографияһын, ауыҙ – тел ижадын һәм әҙәбиәтен өйрәнде, шул хаҡта ғилми хемәттәр яҙып сыҡты.
2. Яңы тема.
1-се бүлек: Рус ғалимдары ижадында Башҡортостан темаһы.
- Рус ғалимдарын һәм языусыларын бигерәк тә башҡорт фольклоры ҡыҙыҡһындырған. 1809 йылда Тимофей Беляев башҡорт эпосы «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» ҙы руссаға тәржемә итеп баҫтыра. Был баҫма төрки телле халыҡтарзың бөтәһе өсөн дә ҙур ваҡиға була, сөнки Көсығыштан халыҡ эпосын рус теленә тәржемәләү тап бына ошо башҡорт хикәйәте менән башланып китә. Эпостың йөкмәткеһен иҫебеҙгә төшөрәйек. (Бер уҡыусы эпосты ҡыҫҡартып һөйләй.)
- Ошо вакиғанан һуң башҡорт фольклоры менән ҡыҙыҡһыныу тағы ла әүҙемләшеп китә. Бында иң элек декабрист шағир П.М.Кудряшевтың (1797 – 1827) эшмәкәрлеген күрһәтергә кәрәк. Ул тәү башлап башҡорттарҙың хәрби – патриотик йырҙарын яҙып ала һәм руссаға тәржемә итә. П.М.Кудряшевтың Башҡортостанға арналған әҫәрҙәре менән танышып китәйек. (Бер уҡыусы ҡыҫҡартып әҫәрҙәре менән таныштыра: «Прощание башкирца с милой», «Песнь башкирца перед сражением», «Песнь башкирца после сражения», «К башкирской девушке», «Абдрахман»).
- Революцин – демократ М.Л.Михайлов (1826 – 1865) яҙыусы дуҫы Н.В.Щелкуновҡа язған хатында үҙенең тиҙ арала башҡортарҙың һөйләү телен өйрәнеүен хәбәр итә. (Бер уҡыусы хат менән ҡыҫҡартып таныштыра. «Письмо Н.В.Щелгунову»).
- Башҡортарҙың көнкүрешен һәм мәҙәниәтен өйрәнгән икенсе бер ғалим

М.В.Лоссиевский ацырым башҡорт әкиәттәрен һәм легендаларын баҫтырып сығара. (Бер уҡыусы әҫәр менән ҡыҫҡартып таныштыра. «Башкирская легенда о месяце»).
- Башҡорт фольклористикаһы өсөн күренекле хеҙмәт ҡалдырған рус ғалимдарының береһе – В.И.Даль. Ул 1830 йылдарҙа башҡорт халыҡ эпосының «Заятүләк менән Һыуһылыу» тигән киң таралған әҫәрен проза формаһындаяҙып ала һәм 1843 йылда «Башкирская русалка» исеме аҫтында баҫтырып сығара. (Бер уҡыусы эпостың йөкмәткеһен ҡыҫҡартып һөйләй.)
- Ун туғыҙынсы быуаттың һуңғы сирегендә Башҡортостанды ныҡлар өйрәнгән ғалимдарҙың күренеклеһе Р.Г.Игнатьев була. Уның башҡорт фольклористикаһы өсөн «Сказания, сказки и песни...» тигән материалы менән бергә бигерәк тә «Башкир Салават Юлаев, пугачевский бригадир, певец и импровизатор» (1894) тигән хеҙмәтенең әһәмиәте ҙур. (Бер уҡыусы Салауат Юлаевҡа арналған әҫәр менән ҡыҫҡартып таныштыра).
Һығымта.
- Шулай итеп, рус ғалимдары башҡорт халыҡ ижадын йыйыу, өйрәнеү һәм баҫтырып сығарыу буйынса күп көс һалған; ә улар башлаған эште Октябрь революцияһынан һуң башҡорт фольклорсылары уңышлы дауам итте.
2-се бүлек: Рус яҙыусылары ижадында Башҡортостан темаһы.
- Башҡортостан тарихы, уның халҡының яҙмышы рус яҙыусыларын да ныҡ ҡыҙыҡһындырған. Бында, бөтәһенән дә элек, бөйөк А.С. Пушкиндың эшмәкәрлеген күрһәтергә кәрәк. 1833 йылдың көҙөндә Ырымбур яҡтарына яһаған сәфәре һөҙөмтәһендә яҙылған «Пугачев тарихы» һәм «Капитан ҡыҙы» тигән күренекле әҫәрҙәрендә башҡорттарҙың 1773 – 1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында әүҙем ҡатнашыуы сәбәптәрен күрһәтеү менән бер рәттән, яҙалап, теле ҡырҡылған, әммә азатлыҡ һәм бәхет өсөн көрәште дауам иттергән башҡорт халҡының иҫтә ҡалырлыҡ дөйөмләштерелгән образын тыуҙыра. (Бер уҡыусы «Пугвчев тарихы» менән ҡыҫҡартып таныштыра).
- Өфөлә тыуып үҫкән, күп ғүмерен башҡорттар арһында үткәргән атаҡлы рус яҙыусыһы С.Т.Аксаков тыуған яғы Башҡортостандың йәмле тәбиғәтен , киң күңелле башҡорт халҡын үҙенең әҫәрҙәрендә һоҡланып тасуир итте. Аксаковтың әҫәрҙәре документаль дөрөҫлөк менән айырылып тора. (Бер уҡыусы уның шиғырын «Вот родина моя!» яттан уҡый).
- Бөйөк рус яҙыусыһы Л.Н.Толстой башҡорт йәйләүҙәрендә өс – дүрт тапҡыр ҡымыҙ эсеп дауаланырға килә. Шул килеүҙәрендә башҡорт халҡын яратырға, яҡындан дуҫлашырға өлгөрә. Башҡорттар тормошо тураһында «Ильяс», «Кешегә күпме ер кәрәк» тигән әҫәрҙәрҙе яҙа. (Бер уҡыусы «Кешегә күпме ер кәрәк» әҫәрен ҡыҫҡартып һөйләй).
- Рус яҙыусылары башҡорттарҙың тормошон тасуир итеп кенә ҡалманылар, уларҙың көнкүрешенең ауырлығын күреп, ныҡ әсенделәр, Рәсәй батшаһының башҡорт ерҙәрен талауына, халыҡты ерһеҙ, ас – яланғас ҡалдырыуына нәфрәт белдерҙе. Был протест тойғолары бигерәк тә М.Е.Салтыков – Щедрин, Г.И.Успенский әҫәрҙәрендә асыҡ сағылды. (Бер уҡыусы М.Е.Салтыков – Щедриндең «Дневник провинциала в Перербурге» әҫәре менән ҡыҫҡартып таныштыра, икенсе уҡыусы – Г.И.Успенскийҙең «От Оренбурга до Уфы»).

- Уралда тыуып үҫкән, башҡорттарҙың рәхимһеҙ иҙелеүен, фәҡирлектәрен үҙ күҙҙәре менән күргән Д.Н.Мамин – Сибирәк был аяныслы хәлдәрҙе тетрәткес итеп һүрәтләне, башҡорт халҡына теләктәшлек белдерҙе, уның азатлыҡ өсөн көрәшкән Салауат Юлаев, Алдар батыр кеүек яугир – егеттәрен данланы. (Уҡытыусы Д.Н.Мамин – Сибиряктең «Ҡара ханум» әҫәрен ҡыҫҡартып һөйләй.)

Һығымта.

- Рус ғалимдарының хеҙмәттәре, яҙыусыларының әҫәрҙәре башҡорттарға социаль тормош хәлдәренә анығыраҡ ҡарарға, аң булырға мөмкинлек бирҙе, азатлыҡ идеяһына ышанысты арттырҙы, халыҡтар дуҫлығын нығытыуға ярҙам итте һәм уларҙа милли уҙаң, милли бөтөнлөк тойғоһо уяныуын тиҙләтте; Башҡортостанда милли эшмәкәрҙәр күтәрәлеп сығыуын әҙерләште.

3. Йомғаҡлау.

- Ни өсөн рус ғалимдары Башҡортостан тарихын, халыҡтың көнкүренешен, йолаларын, ғөрөф – ғәҙәттәрен, этнографияһын һәм ауыҙ – тел ижадын өйрәнгән?
- Был өлкәлә айырыуса кемдәр әүҙемлек күрһәткән?
- Рус яҙыусыларының Башҡортостан һәм уның халҡы тураһындағы әҫәрҙәренең әһәмиәте низә?

4. Өйгә эш.

146 – 150 – се бит, һөйләргә.